МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
ГОСУДАРСТВЕННОЕ АВТОНОМНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ДОПОЛНИТЕЛЬНОГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
ИНСТИТУТ РАЗВИТИЯ ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

# Региональные проверочные работы (РПР)

РАБОТА УЧАЩЕГОСЯ 10 КЛАССА
ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ

**Вариант I**

**Вариант №3 – гос.**

ИМЯ, ФАМИЛИЯ УЧАЩЕГОСЯ ______________________________________________

КЛАСС, ЛИТЕР _____________

ОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ОРГАНИЗАЦИЯ ________________________________________

_________________________________________________________________________

РАЙОН, ГОРОД ______________________________________________________________

ДАТА ВЫПОЛНЕНИЯ РАБОТЫ ______________________________________________

Вариант I

**ВАРИАНТ №3 – гос.**

**1-се өлөш**

| Тексты уҡығыҙ һәм 1-3-сө эш төрҙәрен башҡарығыҙ. |
|---|

**Ватаным**

(1) Ватаным минең йөрәгемдә ниндәй ҙә булһа айырым өлөштәре менән түгел, ә үҙенең бөтә киңлектәре, төҫ-буяуҙары, бөтә дәүерҙәре, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәй. (2)Ватанды өлөштәргә, киҫәктәргә бүлеп яратыу мөмкинме һуң?

(3)Тауҙарҙағы йәшен йәшнәүе лә, сабый бала көлөүе лә, далалағы яңғыҙ убала, республикам өҫтөндә елберләгән өс төҫлө байраҡ та – улар бөтәһе лә минең Ватаным.

(4)Ватаным тиһәк, ергә уны үҙҙәренең эш-фекере менән биҙәү өсөн килгән, был донъяла әллә күпме байлыҡтар ҡалдырып киткән ата-бабаларыбыҙҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. (5)Ватан тиһәк, беҙ хәтер, мөхәббәт һәм хыялды аңлайбыҙ.

(6)Уның үткәндәре менән ғорурланам, хәсрәтләнәм дә мин, бөгөнгөһөн яратам, киләсәге тураһында тулҡынланып уйлайым. (М.Кәримдән)

1

Текста булған мөһим һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдең номерын яҙығыҙ.

(1) Ватаным минең йөрәгемдә ниндәй ҙә булһа айырым өлөштәре менән түгел, ә үҙенең бөтә киңлектәре, төҫ-буяуҙары, бөтә дәүерҙәре, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәй.

(2) Ватанды өлөштәргә, киҫәктәргә бүлеп яратыу мөмкинме һуң?

(5) Ватан тиһәк, беҙ хәтер, мөхәббәт һәм хыялды аңлайбыҙ.

(6) Уның үткәндәре менән ғорурланам, хәсрәтләнәм дә мин, бөгөнгөһөн яратам, киләсәге тураһында тулҡынланып уйлайым.

Яуап:

2

6-сы һөйләмдә ниндәй һөйләм киҫәге тиң булып килә? Яуапты яҙығыҙ.

Яуап:

________________________________

3

1, 4 һөйләмдәрҙән антонимдарҙы табып яҙығыҙ.

Яуап:

________________________________

4

Предметтың эш-хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр нисек атала?

1) исем;

2) сифат;

3) рәүеш;

4) ҡылым

Яуап:

5

Түбән килештә генә яҙылған һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ:

1) китап, дәрслек, урман, күл;

2) тауҙа, уҡыусыла, дуҫымда, ҡоштарҙа;

3) өҫтәлде, уҡытыусыны, ҡәләмде, сәскәне;

4) бүлмәнән, бүләктән, шағирҙан, умартасынан.

Яуап:

6

Шатланыу һүҙенең синонимын билдәләгеҙ:

1) борсолоу;

2) кыуаныу;

3) аптырау;

4) асыуланыу.

Яуап:

7

Кайһы юлда һүҙҙәргә ялғау дөрөҫ кушылмаған?

1) малайҙар, укыусылар;

2) көндәр, урмандар;

3) таулар, яланлар;

4) өҫтәлдәр, китаптар.

Яуап:

8

Яһаусы ялғаулы һүҙҙәр бирелгән юлды билдәләгеҙ.

1) баксасы, ауылдаш, күҙлек;

2) курайҙы, яланда, күлдең;

3) алмаксы, еләкте, башка;

4) исемем, йондоҙҙар, егеттең

Яуап:

9

Хаталы һөйләмде билдәләгеҙ.

1) Мин йәйҙе яратам;

2) Мин йәй көнө һыу инәм.

3) Мин тырышып уҡыйым.

4) Мин әсәйемде ярҙамлашам.

Яуап:

10

С самого утра идет мелкий дождь. Һөйләмленең дөрөҫ тәржемәнен билдәләгеҙ:

1) Иртә таңдан вак ямғыр яуа;

2) Ямғыр вак иртә таңдан яуа;

3) Иртә таңдан яуа вак ямғыр;

4) Яуа иртән таңдан вак ямғыр.

Яуап:

11

Якшы укый һүҙбәйләнешендә якшы һүҙе нинdәй һүҙ төркөмө булып килә? Яуабын яҙығыҙ.

Яуап:

________________________________

12

Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

| № | Һөйләмдәр | Хәреф | Эйәрсән һөйләм төрҙәре |
|---|---|---|---|
| 1. | Үҙегеҙҙең тирә-яғығыҙҙағы тәбиғәтен күҙәтегеҙ, өйрәнегеҙ һәм һаҡлағыҙ! | А | Хәбәр һөйләм |
| 2. | Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең тәбиғәте бик матур | Б | Һорау һөйләм |
| 3. | Ватанды өлөштәргә, киҫәктәргә бүлеп яратыу мөмкинме һуң? | В | Өндәү һөйләм |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.

Яуап:

| А | Б | В |
|---|---|---|
| | | |

13

“Мин һинән кәңәш һорайым (Я.Хамматов) һөйләмендәге кәңәш һүҙе һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?

1) эйә;

2) тултырыусы;

3) хәл;

4) аныҡлаусы.

Яуап:

14

1-се бағаналағы грамматик хаталарға тап килгән һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. 1-се бағаналағы һәр позицияға икенсе бағаналағы позицияны күрһәтегеҙ.

| | **Грамматик хаталар** | | **Һөйләмдәр** |
|---|---|---|---|
| А | Теркәүес алдынан өтөр ҡуйылмаған | 1 | Ҡурай үҫә ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡыйы үлән араһында. |
| Б | һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе боҙолған | 2 | Тауҙар яландар йылғалар күлдәр бөтәһе лә бер көн эсендә ап-аҡ ҡар менән ҡапланды. |
| В | тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә хата | 3 | Мәшәҡәте күп ләкин файҙаһы ла ҙур |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.

Яуап:

| А | Б | В |
|---|---|---|
| | | |

МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
ГОСУДАРСТВЕННОЕ АВТОНОМНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ДОПОЛНИТЕЛЬНОГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
ИНСТИТУТ РАЗВИТИЯ ОБРАЗОВАНИЯ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

# Региональные проверочные работы (РПР)

РАБОТА УЧАЩЕГОСЯ 10 КЛАССА
ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ

**Вариант II**

**Вариант №3 – гос.**

ИМЯ, ФАМИЛИЯ УЧАЩЕГОСЯ ______________________________________________

КЛАСС, ЛИТЕР _____________

ОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ОРГАНИЗАЦИЯ ________________________________________

______________________________________________________________________

РАЙОН, ГОРОД ______________________________________________________

ДАТА ВЫПОЛНЕНИЯ РАБОТЫ ___________________________________________

**Вариант II**

**ВАРИАНТ №3 – гос.**

**1-се өлөш**

Тексты уҡығыҙ һәм 1-3-сө эш төрҙәрен башҡарығыҙ.

**Йәй**

(1) Көтөп алынған йылы ла, йәмле лә йәй етте. (2) Ана, йылға буйҙары сыр-сыу килеп һыу инеүсе бала-сағалар тауышынан гөрләп тора. (3) Йөҙәләр, сумалар, һыу сәсрәтешеп уйнайҙар. (4) Эй күңелле!

(5) Болондар хәҙер йәйғор төҫтәре менән балҡый. (6) Күпме ал, ҡыҙыл, һары, зәңгәр сәскәләр! (7) Бихисап. (8) Ана быуынлы үлән башҡаларҙан ҡалҡыбыраҡ ултыра. (9) Зәп-зәңгәр сәскәһе ниндәй күркәм, зәңгәр күҙҙәр һымаҡ. (10) Уларға эйәреп үҫкән меңсәскә лә, иғтибар менән ҡараһаң, ғәжәп матур икән. (11) Гөлләмәне биҙәп торасаҡ. (12) Клеверҙар, кәрешкәләр, сукмарбаштар, аҡ, күк, ҡыңғырау сәскәләр һәм үләндәр, сәскә атып, болонға һәр ҡайһыны

үҙенсә йәм бирәләр, хуш еҫтәр аңҡыталар. (13) Был хозурлыкҡа күңел ҡыуана, саф һауаһын һулаған һайын һулағы килә.

(14) Ә урмандар йәшел диңгеҙме ни! (15) Бары йүкәләргә генә аҙ-маҙ ҡар яуған. (16) Эйе, сәскә атҡан улар. (17) Үҙҙәренән ниндәй татлы еҫе аңҡый. (18) Тирә-яҡтарында бал ҡорттары безелдәп осоп йөрөй.

1

Текста булған мөһим һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдең номерын яҙығыҙ.

(1) Көтөп алынған йылы ла, йәмле лә яҙ етте.

(3) Йөҙәләр, сумалар, һыу сәсрәтешеп уйнайҙар.

(5) Болондар хәҙер йәйғор төҫтәре менән балҡый.

(9) Зәп-зәңгәр сәскәһе ниндәй күркәм, зәңгәр күҙҙәр һымаҡ.

(15) Бары йүкәләргә генә аҙ-маҙ ҡар яуған.

Яуап:

2

6- сы һөйләмдә ниндәй һөйләм киҫәге тиң булып килә? Яуапты яҙығыҙ.

Яуап:

______________________________

3

9, 10-сы һөйләмдәрҙән синонимдарҙы табып яҙығыҙ.

Яуап:

_______________________________

4

Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр нисек атала?

1) исем;

2) сифат;

3) рәүеш;

4) ҡылым

Яуап:

5

Эйәлек килештә генә яҙылған һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ:

1) китап, дәрслек, урман, күл;

2) тауҙа, уҡыусыла, дуҫымда, ҡоштарҙа;

3) өҫтәлдең, уҡытыусының, ҡәләмдең, сәскәнең;

4) бүлмәнән, бүләктән, шағирҙан, умартасынан.

Яуап:

6

Ҡайһы юлда "ҡыйыу" һүҙенең синонимы бирелгән?

1) ҡурҡаҡ;

2) аҡыллы;

3) батыр;

4) теләк.

Яуап:

7

Составында тик ҡалын һуҙынҡылар булған һүҙҙе күрһәтегеҙ:

1) эшләйәсәк;

2) барасаҡ;

3) түҙәсәк;

4) киләсәк.

Яуап:

8

Яңғыҙ ялғаулы һүҙҙәр бирелгән юлды билдәләгеҙ.

1) башла, эштә, эштәр;

2) китә, килде, килер;

3) ҡоролош, боролош, төҙөлөш;

4) елдәр, елгә, елдә.

Яуап:

9

Хатаһыҙ һөйләмде билдәләгеҙ.

1) Көн һайын тыуған яғымдың матурлығына һокланам;

2) Көн һайын матурлығына һокланам тыуған яғымдың;

3) Тыуған яғымдың матурлығына һокланам көн һайын;

4) Һокланам көнһайын тыуған яғымдың матурлығына.

Яуап:

10

Я стою на вершине высокой горы. Һөйләменең дөрөҫ тәржемәһен билдәләгеҙ:

1) Бейек тау башында торам мин;

2) Мин торам бейек тау башында;

3) Мин бейек тау башында торам;

4) Тау башында мин бейек торам.

Яуап:

11

Айыу майы һөртөү һүҙҙәрен мәғәнәһе буйынса нисек атап була? Яуабын яҙығыҙ.

1) омонимдар;

2) антонимдар;

3) фразелогизмдар;

4) синонимдар.

Яуап:

______________________________

12

Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ:

| № | Һөйләмдәр | Хәреф | Эйәрсән һөйләм төрҙәре |
|---|---|---|---|
| 1. | Үҙегеҙҙең тирә-яғығыҙҙағы тәбиғәтен күҙәтегеҙ, өйрәнегеҙ һәм һаҡлағыҙ! | А | Хәбәр һөйләм |
| 2. | Салауат Юлаевтың әсәһе тураһында архив материалдары бик аҙ. | Б | Һорау һөйләм |
| 3. | Һеҙ беренсе тапҡыр театрҙа ҡасан булдығыҙ? | В | Өндәү һөйләм |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.

Яуап:

| А | Б | В |
|---|---|---|
| | | |

13

Тук башаҡтар үҙенән-үҙе үҫмәй. һөйләмендәге тук һүҙе һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?

1) эйә;

2) тултырыусы;

3) хәл;

4) аныҡлаусы.

Яуап:

| |
|---|
| |
| 14 |

1-се бағаналағы грамматик хаталарға тап килгән һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. 1-се бағаналағы һәр позицияға икенсе бағаналағы позицияны күрһәтегеҙ.

| | **Грамматик хаталар** | | **Һөйләмдәр** |
|---|---|---|---|
| А | Теркәүес алдынан өтөр ҡуйылмаған | 1 | Ерҙе ашларға һөрөргә тырматырға кәрәк. |
| Б | һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе боҙолған | 2 | Беҙ уның менән ярыштарҙа бергә булдыҡ ләкин ул мине таныманы. |
| В | тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә хата | 3 | Баш эйергә тейеш кеше бал ҡорто алдында. |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.

Яуап:

| А | Б | В |
|---|---|---|
| | | |